| 4.8 | Особенности башкирской «деревенской» прозы 60-70-х годов. Тема родной земли и судьбы деревни | Ф.Иҫәнғоловтың «Сыуаҡ көндәр», Ш.Янбаевтың “Зәңгәр сатыр”, Я.Вәлиевтың “Бөркөттәр оя ташламай” романдарында, проблематик үҙенсәлектәр, образдар системаһы; жанр һәм стиль үҙенсәлектәре.<br>И.Ғиззәтуллиндың “Ғашиҡтар баҡсаһы”, Н.Мусиндың “Ауылым юлы”, “Зөһрә”, Р.Низамовтың «Мәрйәм», «Хәбәрсе» повестарында ауыл темаһы бирелеше, проблематикаһы.<br>Роман, повесть, хикәйә жанры үҫеше.<br>Соцреализм сиктәрендә герой концепцияһы. |
| 4.9 | Жанровое и стилевое разнообразие в башкирской драматургии. Историческая,социальная, психологическая, философская драма | Драмала тарихи тема (Ә.Мирзаһитов “Шайморатов генерал”), музыкаль комедия жанры (Н.Асанбаев “Һыу юлы” «Хәйбүш түрә, бисәһе Мәстүрә», И.Абдуллин “Их, Өфө ҡыҙҙары!, социаль драма (“Ә.Атнабаев “Ул ҡайтты”, Р.Сафин “Йәнбикә”, “Ә.Мирзаһитов “Әсәләр көтәләр улдарын”,Н.Асанбаев «Рәйсә менән Фәйзи», Ә.Атнабаев“Балаҡайҙарым”), комедия (М.Күрим “Ҡыҙ урлау”, И.Абдуллин “Бажалар”). Драмаларҙа осор ҡаршылыҡтарын күрһәтеү. |
| 4.12 | Драматургия М.Карима | М. Кәримдең 60-70-се йылдар шиғриәтендә философик лирика, мөхәббәт һәм граждандлыҡ лирикаһы. М. Кәрим поэмалары. Мостай Кәримдең проза |

| | | |
|---|---|---|
| | | әҫәрҙәре. «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесының жанр үҙенсәлеге, геройҙары. Оло Инәй образы. «Ярлыҡау» повесында енәйәт һәм яза проблемаһы. Һуғыш осороноң ҡәтғи закондары һәм кеше ғүмеренең ҡиммәте. «Ауыл адвокаттары», «Ғүмер ярсыҡтары» повестарында жанр һәм стиль яңылыҡтары, сюжет һәм композиция үҙенсәлектәре.Триптих булараҡ «Ай тотолған төндә», «Салауат», «Ташлама утты, Прометей!» трагедиялары. М.Кәримдең «Айгөл иле» драмаһында төп образдың романтик һыҙаттары. Ҡыҙ урлау", "Йәйәүле Мәхмүт", "Диктаторға ат бирегеҙ! әҫәрҙәренең социаль яңғырашы. Ғ.Хөсәйеновтың «М.Кәрим» китабы. |
| 4.13 | Жизнь и творчество З.Биишевой | З. Биишеваның «Яҡтыға» трилогияһында Емеш образы. З. Биишеваның «Тылсымлы ҡурай» «Мөхәббәт һәм нәфрәт», «Нәҙер» әҫәрҙәрендә халыҡ ижады поэтикаһы, фәлсәфәүи символика күренештәре. Зәйнәб Биишева шиғриәте, поэма һәм йырҙары. Уның шиғриәтендә лирик герой үҙенсәлектәре. Намыҫ, хеҙмәт идеалдарын алға ҡуйған «Кешесә», туған тел матурлығын данлаған «Башҡорт теле» шиғырҙары. «Теләр инем…» шиғырында йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйланыуҙары. Көй яҙылып, халыҡ араһына таралған «Миләш», «Алтын балдаҡ», «Илап тыуһам да мин…» шиғырҙарында лирик нескәлек менән бирелгән һөйгән йәренә, тыуған иленә мөхәббәт хистәре. Афоризмға бай дүртъюллыҡтар. «Халыҡ яҙыусыһы З.Биишева» иҫтәлектәр китабы, уның хаҡында альбом. |
| 4.14 | Жизнь и творчество Р.Гарипова | Салауат районы Арҡауыл ауылында тыуыуы. Әҙәбиәткә килеү юлдары. Үҙе иҫән саҡта ете китабы донъя күреүе. «Таш сәскә» китабының әҙәбиәттә ваҡиға булараҡ ҡабул ителеүе (1958). Үҙе үлгәндән һуң шағирҙың мираҫы тотошлай баҫылып сығыуы. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас баҫылған мираҫы.<br>Р. Ғарипов ижадында милләт, халыҡ яҙмышы хаҡында уйланыуҙар. «Башҡорт теле», «Урал йөрәге», «Шлиссельбург тотҡоно» шиғырҙары, «Уйҙарым» ҡобайыры.<br>1964 йылда яҙылған «Табыныу» поэмаһының баҫылыу тарихы. Уның репрессия йылдарына арналыуы.. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Поэманың художестволы эшләнеше.<br>«Интегралдар поэмаһы». Мөхәббәт, кешенең уй-фекер, йән азатлығы идеяларының көтөлмәгән образдар аша бирелеше.<br>Р. Ғарипов лирикаһы. Ижадында халыҡсан образдар. Тел байлығы, образлылылыҡ сараларының романтик буяуҙарға бай булыуы.<br>Р. Ғарипов көндәлектәре. Унда йәш кешенең үҙ-үҙен камиллаштырыуы өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләүен, уҡыу, аң-белем, тән һәм йән сынығыуы үтеүен һүрәтләү.<br>Р. Ғарипов тәржемәләре. «Минең антологиям» китабына ингән тәржемәләр.<br>Ғ. Хайәмде тәржемәләүе. Уларҙың башҡортсаға тәржемә өлкәһендә ҙур күренеш булыуы.<br>Рәми Ғарипов хаҡында халыҡ шағиры Р. Бикбаев. |
| 4.15 | Жизнь и творчество Р.Назарова | Шағирҙың лирик геройының  Йәшен", "Йөрәк" шиғырҙарында һүрәтләнеше.<br>Ваҡыт, мәңгелек, йәшәү мәғәнәһенә бәйле фәлсәфәүи темаға "Ғүмер" һ.б. шиғырҙарына анализ.<br>Р.Назаров ижадында донъя, тәбиғәт күренештәренә бәйле метафора һәм образдар: "Йондоҙҙар туйы", "Төн", «Йәйге төн»,  "Көрәш", "Ярып үтәм төндөң ҡуйылығын" шиғырҙарына анализ.<br>Р.Назаров ижадында хеҙмәт кешеһе образы: "Тракторист йыры", "Бесәнсе йыры", "Таң", "Уйланыу", «Ер йыры!, «Һалдат» шиғырҙары, заман менән бәйлелек.<br>"Әсә  һүҙҙәре" шиғырҙар шәлкеме.<br>З.Исмәғилев тарафынан ижад ителгән романстар.<br>Р.Назаров ижадында традицион булған йөрәк, таң, юл, ай, ҡояш  һ.б. образдарының йөкмәткеһен миҫалдар ярҙамында аңлатығыҙ.<br>«Ер аҫтынан һеҙгә хаттар яҙам» шәлкемендә оптимизм, яҡтылыҡҡа ынтылыу. Р.Назаровтың Шағирҙың ерҙәге миссияһы хаҡында шиғырҙары.<br>Лирик поэмалар. |
| 4.17 | Жизнь и творчество Я.Хамматова | Я.Хамматовтың тарихи роман өлкәһендә актив эшмәкәрлеге. «Бөртөкләп йыйыла |

| | | |
|---|---|---|
| | | алтын» тарихи-революцион романының аҙаҡ пенталогия булып өлгөрөүе. Тарихи-революцион роман һәм уның эволюцияһы, төп үҫеш баҫҡыстары. «Бөртөкләп йыйыла алтын», «Аҡман-тоҡман», «Йәшенле йәй», “Юрғашты”, “Руда” романдары. |
| 4.19 | Жизнь и творчество Г.Ибрагимова | Ижадында башланғыс осор. Тәүге романдары: "Бер полк кешеләре", (1956), "Ай битен йыуғанда", "Умырзая". Повестары: "Йәшен ташы" һ.б.<br>«Кинйә» романы:<br>- "Тапалған йәйләү" (Беренсе китап, 1977);<br>- "Ил ағаһы" (Икенсе китап, 1987);<br>- "Кинйә" (Өсөнсө китап, 2009).<br>Романда төп образды художестволы һынландырыу. Прототибы. К.Арыҫланов тураһында тарихи мәғлүмәттәр.<br>Романдың тарихи нигеҙе, эпик һыҙаттары. Башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны.<br>Көйөргәҙе районы Кинйә ауылын һаҡлап ҡалыу тарихы. Данлыҡлы батырҙың исемен мәңгеләштереү өсөн башҡарылған эштәр. Был ауылдан сыҡҡан Советтар Союзы геройҙары. |
| 4.20 | Жизнь и творчество Н.Наждми | Әҙиптең һуғышҡа тиклемге осорҙағы тәүге шиғырҙары һәм хикәйәләре. «Тамсылар» исемле беренсе шиғырҙар китабына ингән шиғырҙарҙың жанр төрҙәре, идея-эстетик, стиль йүнәлештәре. «Тулҡындар» (1955), «Көтөлмәгән ямғыр» (1960), «Ер һәм йыр» (1962), «Шиғырҙар һәм поэмалар» (1964) кеүек артабанғы шиғри китаптарында һынланған үҫеш этаптары.<br>Назар Нәжми лирикаһының төп йүнәлештәре, лирик геройы үҙенсәлектәре. «Бер йыр килде», «Әллә ниндәй уйҙар солғап алған» шиғырҙарыда шағир һәм заман, халыҡ алдында яуаплылылыҡ мәсьәләләрен ҡуҙғатыуы, «конфликтһыҙлыҡ теорияһына» ҡаршы сығыуы.<br>Н. Нәжмиҙең һуғыш фажиғәһенә бағышланған «Ҡайындар» поэмаһы. «Ҡапҡалар» поэмаһында ике донъя, ике быуын, ике заманды тоташтырған ҡапҡаларҙы күңел ҡапҡалары менән бәйләнештә тасуирлау. «Йыр тураһында баллада» поэмаһының М. Хариҫҡа бағышланыуы, уның һымаҡ яу ҡырында ятып ҡалған ир-егеттәр иҫтәлеген мәңгеләштереүе. Ҡамсы менән ҡылыс |

| | | |
|---|---|---|
| | | образдары.<br>«Шағир һәм шаһ» поэмаһының көнсығыш традицияларында яҙылыуы, шағирлыҡ мәсьәләһен ҡуйыуы, кеше бәхете, эске донъяһы хаҡында уйланыуҙары.<br>«Иблес» поэмаһын авторҙың «ижадымда иң етди әҫәр» тип баһалауы. Рухи ҡоллоҡ, иманһыҙлыҡ менән кеше шәхесенең мәңгелек көрәшен һүрәтләү. Иблес менән Әхмәт диалогы.<br>Н. Нәжми драматургияһы. «Хуш, Хәйрүш», «Егет егетлеген итә», «Саҡырылмаған ҡунаҡ», «Гармунсы» һ.б. пьесалары, уларҙың жанр төрҙәре һәм үҙенсәлектәре.<br>Н. Нәжмиҙең публицистика, тәнҡит һәм тәржемә өлкәһендәге хеҙмәттәре.<br>Н. Нәжми ижадын өйрәнеүҙә К. Әхмәтйәнов, Ғ. Хөсәйенов, Р. Бикбаевтар эшмәкәрлеге. |
| **5** | **История башкирской литературы в 80-90--е гг. XX в.** | |
| 5.1 | Предшествия и предпосылки современного этапа. Литература конца 70-х-начала 80-х годов XX века. Художественное сознание «семидесятых» - драматизм. Процессы расшатывания соцреализма | Курстың маҡсаты, бурыстары, башҡорт әҙәбиәте тарихындағы урыны, башҡа предметтар (тарих, философия, әҙәби тәнҡит, әҙәбиәт теорияһы, бибиография, текстология һ.б.) менән бәйләнеше. 80-се йылдарҙың ижтимағи үҫеш юлында ҡаршылыҡлы осор булыуы, үҙгәртеп ҡороуға тиклемге һәм үҙгәртеп ҡороу йылдарына ҡырҡа бүленеүе. Ошо һынылыштың башҡорт әҙәбиәтендә лә сағылышы. Герой концепцияһы, проблема ҡуйылышы, конфликт тәбиғәте әлкәһендә яңы үҙгәрештәр. Әҫәрҙәрҙә тәнҡит рухы көсәйеүе. |
| 5.2 | Жанры и жанровые формы поэзии 70-х-начала 80-х годов XX века. Идейно-тематическое своеобразие. Концепция лирического героя. Образ деревни. | Торғонлоҡ йылдарының ойотҡос тәьҫиренең ысынбарлыҡ тармаҡтарына үтеп инеүе, 80-се йылдар башы шиғриәтендә үҙенсәлекле сағылыш табыуы. М.Кәримдең «Прометей монологтары» (1980-1981) шиғри циклы. Н.Нәжмиҙең «Ел тоғо», З.Биишеваның «Имән» әҫәрҙәрендә торғонлоҡтоң таш ҡалыптары күҙ алдына баҫтырылыуы. Н.Нәжмиҙең «Дошмандарға», «Ауыл артисы», И.Кинйәбулатовтың «Тоҙ һибәләр» шиғырҙарында шул осор йәмғиәтенең сатирик портреты күрһәтелеүе. Р.Тойғоновтың «Ҡул йылыһы» (1982), Р.Сафиндың «Яҙҙар көтәм», Н.Нәжмиҙең «Тарафтар» (1980), Р.Бикбаевтың «Ерем балҡышы», |

| | | |
|---|---|---|
| | | «Бураҙналар», С.Әлибаевтың «Ҡойон» исемле йыйынтыҡтарына ингән шиғыр, поэмаларҙың фәлсәфәүи йөкмәткеһе, кеше яҙмышы, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланыуҙарға нигеҙләнеүе. К.Кинйәбулатованың «Әсә һулышы» (1980), Ә.Атнабаевтың «Мөхәббәт юлы», А.Игебаевтың «Шиғырҙар һәм поэмалар», М.Кәримовтың «Ете көнөм - ете моң» китаптарында лирик герой үҙенсәлектәре. Р.Бикбаев, Р.Мифтахов, К.Кинйәбулатова, Ә.Атнабаев, А.Игебаев, Р.Хисаметдинова һ.б. шиғырҙарында тәбиғәт алдында кешенең яуаплылығы үҙәккә ҡуйылыуы. Х.Ғиләжевтың «Асыулы шиғырҙар» шәлкеме. Кеше намыҫының саялығын, мөнәсәбәттәрҙең ихласлығын яҡлау йәһәтенән М.Ғәли шиғриәте. Күп кенә ауылдарҙың «перспективаһыҙ» мөһөрө һуғылған аяныслы яҙмышы тураһында "К.Аралбаевтың «Аҡ тирмә» поэмаһы, Т.Йосопов, И.Кинйәбулатов шиғырҙары. |
| 5.3 | Башкирская проза конца 80-х-начала 90-х годов (обзор). Поэтика современных рассказов. Социально-психологические рассказы. | 80-90-сы йылдар прозаһындағы идея-тематик үҫеш-үҙгәрештәр, заман темаһын үҙләштереү, замандаш образын һынландырыу үҙенсәлектәре. Р.Солтангәрәевтың «Беҙ йәшәгән ер», Д.Бүләковтың «Килмешәк», «Ғүмер бер генә», «Туҙҙырылған тамуҡ», Р.Байымовтың «Яуап бирер көн», Н.Мусиндың «Зәңгәртауҙа - аҡ болан», «Яралы кеше тауышы», «Таң менән сыҡ юлдарға», Ш.Янбаевтың «Беүә буйҡайҙары һары тал», С.Шәриповтың «Хушлашмайым», Н.Ғәйетбаевтың «Уҙыш» романдарында конфликттар тәбиғәте, производство, экология, тирә-яҡ мөхит мәсьәләләренең социаль-әхлаҡи проблемалар менән тығыҙ үрелеүе. 70-80-се йылдарҙың тәүге яртыһында романтик герой урынына торғонлоҡ осоро негатив күренештәренә ҡаршы көрәш юлына баҫҡан герой образы килеүе. Романтик тулҡындың ҡырыҫ реализм менән ҡыҫырыҡланыуы. 80-се йылдар хикәйәләрендә ысынбарлыҡтың күп яҡлы һүрәтләнеүе, замандың социаль һәм рухи проблемаларының сағылышы. Ш.Янбаевтың «Йәшәү һуты» китабына ингән хикәйәләрендә кешелеклелек принциптарының художестволы сағылышы, Р.Солтангәрәевтың «Тыуған |

| | | |
|---|---|---|
| | | яҡҡа ҡайтыу» китабына ингән хикәйәләрендә герой проблемаһы. Р.Байымовтың «Сарсау», «Бикле хазина» китаптарына ингән хикәйәләрендә шәхес теремеклеге мәсьәләһе. Д.Бүләковтың «Ҡыйырсыҡ ай», «Шарлауыҡ», Ғ.Байбуриндың «Ҡояш һәм кеше», «Мин һине яратам», Б.Рафиҡовтың «Үр елдәре» китаптарына ингән хикәйәләрендә әхлаҡи мәсьәләләрҙең ҡуйылышы. 80-се йылдарҙың икенсе яртыһы һәм 90-сы йылдарҙа ижад ителгән әҫәрҙәрҙә герой концепцияһы, проблема ҡуйылышы, конфликт сиселеше үҙенсәлектәре. |
| 5.4 | Культурная атмосфера в конце 1980-х – начале 90-х. «Гласность». «Возвращенная литература». Литература периода постсоветизма. Публицистика | 80-се йылдарҙың ижтимағи үҫеш юлында ҡаршылыҡлы осор булыуы, үҙгәртеп ҡороуға тиклемге һәм үҙгәртеп ҡороу йылдарына ҡырҡа бүленеүе. Ошо һынылыштың башҡорт әҙәбиәтендә лә сағылышы. Герой концепцияһы, проблема ҡуйылышы, конфликт тәбиғәте әлкәһендә яңы үҙгәрештәр. Әҫәрҙәрҙә тәнҡит рухы көсәйеүе. Демократияның киңәйеүе, тарихҡа яңыса ҡараш һөҙөмтәһендә нахаҡҡа рәнйетелгән исемдәрҙең аҡланыуы. Әҙәби мираҫҡа ҡараштың объектив төҫ ала барыуы. Тәбиғәтте һаҡлау, милләттең һәм телдең киләсәк яҙмышы мәсьәләләре, рухи экология хаҡында ла үткер әҫәрҙәр тыуыуы. Элекке этаптарҙа тыйылған кисерештәрҙең, фекерҙәрҙең реабилитацияланыуы, үҙгәртеп ҡороуҙың ижад офоҡтарын киңәйтеүе, догматик ҡалыптарҙың емерелә барыуы. Публицистиканың йәнләнеүе. |
| 5.5 | Образы выдающихся личностей в литературе 1980-90-х гг. Историко-документальные жанры. Б.Рафиков «Карасакал», Р.Уметбаев «Генерал Кусимов», книга «Муса батыр» и др. | Демократия шарттарында ил тарихындағы мөһим мәлдәрҙе яңы күҙлектән яҡтыртыу. Ә.Хәкимовтың «Өйөрмә», М.Хәйҙәровтың «Китмәҫ әсән килдем» романдарында шәхес культы осоро сағылышы. М.Ямалетдиновтың, Р.Солтангәрәевтың, Я.Хамматовтың «Муса батыр» исемле китапҡа ингән повестарында Муса Мортазин образы. Р.Байымовтың «Сыбар шоңҡар» романы, жанр һәм проблематик яңылығы. Башҡортостан биләмәләрендә барған граждандар һуғышына, башҡорт автономияһы, милли хәрәкәт һәм уның лидерҙарына ҡарата яңы ҡараш. Романдың образдар системаһы, сюжет һәм композиция үҙенсәлектәре. |
| 5.6 | Проблематика и поэтика романов. | 80-се йылдар башынан алып 90-сы йылдар |

| | | |
|---|---|---|
| | Тема современности. Исторические романы. Классификация | дауамында тарихи теманың нығыныуы. Ә.Хәкимовтың «һауыр ҡумта», «Думбыра сыңы», Я.Хамматовтың «Төнъяҡ амурҙары», «Ҡара яу», «Ағиҙел Иҙелгә ҡоя», Б.Рафиҡовтың «Ҡараһаҡал», «Ахырызаман көткәндә», «Көнгәк», «Эйәрле ат», Ғ.Хөсәйеновтың «Ҡанлы илле биш» романдары. Тарихи шәхес образын һынландырыуҙағы алымдар. |
| 5.7 | Исторические романы А.Хакимова | Әхиәр Хәкимовтың «Думбыра сыңы», «Һауыр ҡумта» романдарының яҙылыу тарихы, тарихи ерлеге.<br>Халыҡ азатлығы, үҙ аллы дәүләт өсөн көрәш темаһы.<br>А) Һабрау йырау,Боғара бей, Юлыш һәм Сырым батырҙар;<br>Б) көрәш юлындағы ҡаршылыҡтар.<br>«Һауыр ҡумта» романында рухи азатлыҡ мәсьәләләренең ҡуйылышы. Ҡыуандыҡ һәм Көмөш тамсы образдары.<br>Йәмғиәт һәм прогресс. Фән һәм ғилем, һөнәр, мәғрифәттең йәмғиәт үҫешендә тотҡан урыны, шәхестең быға йоғонтоһо. Ҡыуандыҡ, ҡарт оҫта, Сәйфелмөлөк образдары.<br>Ата-бабаларҙың боронғо дине. Башҡорттарҙың ислам динен ҡабул итеүе. Сәйфелмөлөк һәм Ҡылтас Зирәк образдары. |
| 5.12 | Проблемы человека и общества в современной башкирской литературе | Р.Солтангәрәевтың «Беҙ йәшәгән ер» романында тәбиғәтте һаҡлау, ер кешеһе яҙмышы мәсьәләләре.<br>А.Абдуллиндың «Ун өсөнсө председатель» пьесаһында Сәғәҙиев образы. Торғонлоҡ осоронда ерҙә хужалыҡ итеүгә бәйле экономик мәсьәләләр.<br>Б.Рафиҡовтың «Тауҙарҙа ҡар иртә ята», «Сал ҡылған» әҫәрҙәрендә осорҙоң әхлаҡи ҡаршылыҡтарын биреү үҙенсәлектәре. |

Курс практических/семинарских занятий

| № | Наименование раздела / темы дисциплины | Содержание |
|---|---|---|
| **1** | **История башкирской литературы до начала XX века** | |
| 1.2 | Древнетюркская литература | Әҙәби мираҫ һәм культура хаҡында төшөнсә. Әҙәбиәт тарихын осорҙарға бүлеү. Руник яҙма ҡомартҡылар. М. Ҡашғариҙың “Диуану лөғәт әт-төрк”. Йософ Баласағунлының “Ҡотаҙғу белек” әҫәре. Башҡорт-уғыҙ традициялары һәм “Ҡорҡот-ата китабы”. Болғар осоронда |

| | | |
|---|---|---|
| | | культура һәм әҙәбиәт. Башҡорт-болғар мөнәсәбәттәре. Ҡол Ғәлиҙең “Ҡиссаи Йософ” әҫәре. |
| 1.4 | Башкирская литература в период присоединения к России | XVI быуатта башҡорт үҙ ирке менән Рәсәй дәүләте составына инеүе. Башҡорттар бер халыҡ булып ойоша башлауы, ерҙәренең конкрет сиктәре билдәләнеүе, дуҫлыҡ – туғанлыҡ мөнәсәбәттәре, әҙәби – мәҙәни бәйләнештәр нығыныуы. Крайҙы өйрәнеүсе рус ғалимдарының хеҙмәттәре. Башҡорт восстаниеларына бәйле әҫәрҙәр. Эпистоляр жанрҙың формалашыуы: “Батыршаның батшаға яҙған хаты”. С.Юлаев тормошо һәм ижады. |
| 1.6 | Башкирская литература кыпчакского периода | Башҡорт халҡының татар-монголдарға ҡаршы көрәше, был ваҡиғаларҙың халыҡ ижадында сағылышы. Алтын Урҙа дәүләтендә әҙәбиәт һәм мәҙәниәттең үҫеше. Башҡорт яҙма теленең формалашыуы. Йырауҙар ижады. |
| 1.8 | Творчество А.Каргалы | Ә. Ҡарғалының тормошо һәм ижады. “Тәржемәи Хажи Әбелмәних әл-бистәүи әс-Сәғиди” әҫәрендә Ә. Ҡарғалының биографияһына ҡағылышлы мәғлүмәттәр. “Мөнәжәт әл-хажи Әбелмәних әл-Ҡарғалы”, “Шикәйәт” , “Ғәмме кидәрер өч нәрсә” шиғырҙарының идея-тематик йөкмәткеһе. Ш. Зәкиҙең тормошо һәм ижады юлы. “Фәлсәфә-хәҡиҡәтте эҙләүселәрҙе әҙерләүсе башланғыс”, “Булғай, булмағай” әҫәрҙәренең идеяһы. “Уян”, “Һибәтулла хәҙрәткә хат” шиғырҙарының идея-тематик йөкмәткеһе. З.Расулов тормошо һәм ижады. |
| 1.9 | Творчество Т.Ялсугул | Т. Ялсығолдоң тормошо һәм ижады.<br>Т. Ялсығолдоң тәржемә эштәре. Тәржемә ителгән китаптарының дини-мистик рух менән һуғарылыуы.<br>“Тарихнамәи болғар” (“Болғарҙар хаҡында тарихи яҙма”) китабының төҙөлөшө, идея-тематик йөкмәткеһе.<br>“Риссаләи Ғәзизә” (“Ғәзизәгә трактат”) китабының төҙөлөшө, йөкмәткеһе. |
| 1.10 | Поэзия М.Акмуллы. | Осорға (19-сы б. II яртыһы) характеристика. М. Аҡмулланың тормош юлы. М. Аҡмулла идея - эстетик ҡараштары. М. Аҡмулла поэзияһы.<br>а) шиғриәтенең сығанаҡтары;<br>б) идея - тематик йөкмәткеһе һәм жанр үҙенсәлектәре;<br>в) шиғырҙарының төҙөлөшө, тел - стиль үҙенсәлектәре. |
| 1.17 | Поэма Кул Гали «Киса Юсуф» | Ҡол Ғәли тормошо һәм ижады. “Киссаи |

| | | |
|---|---|---|
| | | Йософ” әҫәренең жанр-стиль үҙенсәлектәре. “Ҡиссаи Йософ” әҫәренең яҙылыу тарихы. “Ҡиссаи Йософ” әҫәрендә төп геройҙар. Әҫәрҙә күтәрелгән фәлсәфәүи проблемалар. Ҡиссаның башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны. |
| 1.19 | Традиции суфизма в башкирской литературе. | Һибәтулла Сәлихов ижады.<br>Шәмситдин Зәки ижады.<br>Ғәли Соҡорой ижады. |
| 1.20 | Творческое наследие Р.Фахретдинова. | Р. Фәхретдиндың тормошо һәм ижады. Р. Фәхретдиндың “Сәлимә” повесында заманса йәшәргә ынтылыу идеяһы. “Әсмә” әҫәрендә тәрбиә, әхлаҡ, ҡатын-ҡыҙҙар проблемалары. Төп геройҙарға характеристика. “Аҫар” китабының төҙөлөшө һәм тәғәйенләнеше. |
| 1.21 | Жизнь и творчество М.Уметбаева | М. Өмөтбаевтың тормошо һәм ижады. Ғилми эшмәкәрлеге. “Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы” шиғырында этнографик күренеш – туй йолаһы. “Үткән ғүмер – ҡалған хәтер” шиғырында тарихи дөрөҫлөктөң сағылышы. “Йомран иле”, “Шикәйәт” шиғырында бапшҡорт ерҙәренең аяуһыҙ таланыуы, халыҡтынт зары һүрәтләнеүе. “Ҡайыш илә Йүкә” мәҫәлендә иҙеүсе һәм иҙелеүселәрҙең социаль хәле. Ҡайыш, Йүкә образдары. Мөхәббәт лирикаһы. “Бер ҡалала гүзәл күренеш”, “Минең ғишҡым”, “Ниҙән?”, “Һағыныу” һ.б. Публицистик эшмәкәрлеге. “Йәмғиәт тәртиптәре”, “Көрәшсе” мәҡәләләрендә халыҡ уйҙары, өмөт-хыялдарының сағылыуы. “Йәдкәр” китабы. |
| **2** | **История башкирской литературы в 1900-1930-х годах** | |
| 2.4 | Башкирская драматургия в 1900-1917-е гг. | Драма әҫәрҙәрен ижад итеү өлкәһендә А.Таһировтың тәүге тәжирбәләре.Ғ.Ғүмәрскийҙың пьесалары. Ф.Туйкиндың «Ватан ҡаһармандары», «Тормош ҡорбандары» драмаларының башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны. Б.Бәхтигәрәйҙең «Ер һатыу» драмаһының проблематикаһы. Ғ.Ниязбаев драматургияһының үҙенсәлектәре. |
| 2.5 | Особенности башкирской поэзия в 20-е годы. | Милли матбуғат формалашыуы. Башҡорт яҙма әҙәби телен булдырыу. Башҡорт совет яҙыусылары союзын төҙөү. Әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә идеологик көрәш. Әҙәби ағымдар. Д.Юлтыйҙың «Яңы әҙәби ағымдарҙың гегемонияһы тураһында» мәҡәләһенең асылы. Әҙәбиәт һәм сәнғәт үҫешенә партия ҡарарҙарының йоғонтоһо. 20-се йылдарҙа әҙәбиәттә жанрҙар формалашыуында нәҫер һәм |

| | | |
|---|---|---|
| | | публицистиканың роле. 20-се йылдар хикәйәһе. Жанр үҙенсәлектәре, үҫеү йүнәлештәре. 20-се йылдар әҙәбиәтенең дөйөм һыҙаттары. |
| 2.9 | Проза З.Хади | З.Һаҙыйҙың тормош юлы һәм ижады. «Бәхетле ҡыҙ», «Бәхетһеҙ ҡыҙ» хикәйәләрендә мәғрифәтселек идеяларының сағылышы. «Мәғсүм», «Яңы әсхәбә ҡәһәф» әҫәрҙәрендә социаль мотивтар. «Йыһанша хәҙрәт» повесында тәнҡитле реализм күренештәре |
| 2.10 | Жизнь и творчество С.Якшигулова | С.Яҡшығоловтың тормош юлы һәм ижады. С.Яҡшығоловтың поэтик образдар өлкәһендәге табыштары. Шағирҙың милли тематиканы байытыуҙағы роле. «Башҡорт хәлдәре», «Дим буйы» йыйынтыҡтарына ингән шиғырҙарҙың идея-тематик үҙенсәлектәре. «Күңел ялҡындары» китабында тәнҡитле реализм һыҙаттарының сағылышы. |
| 2.11 | Становление башкирской драматургии в начале XX века | Драма әҫәрҙәрен ижад итеү өлкәһендә А.Таһировтың тәүге тәжирбәләре.Ғ.Ғүмәрскийҙың пьесалары. Ф.Туйкиндың «Ватан ҡаһармандары», «Тормош ҡорбандары» драмаларының башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны. Б.Бәхтигәрәйҙең «Ер һатыу» драмаһының проблематикаһы. Ғ.Ниязбаев драматургияһының үҙенсәлектәре. |
| 2.12 | Культура и литература в Башкортостане в 20-е годы XX века | Милли матбуғат формалашыуы. Башҡорт яҙма әҙәби телен булдырыу. Башҡорт совет яҙыусылары союзын төҙөү. Әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә идеологик көрәш. Әҙәби ағымдар. Д.Юлтыйҙың «Яңы әҙәби ағымдарҙың гегемонияһы тураһында» мәҡәләһенең асылы. Әҙәбиәт һәм сәнғәт үҫешенә партия ҡарарҙарының йоғонтоһо. 20-се йылдарҙа әҙәбиәттә жанрҙар формалашыуында нәҫер һәм публицистиканың роле. 20-се йылдар хикәйәһе. Жанр үҙенсәлектәре, үҫеү йүнәлештәре. 20-се йылдар әҙәбиәтенең дөйөм һыҙаттары. |
| 2.13 | Жизнь и творчество Ш.Бабича. | Башланғыс ижадында мәғрифәтселек идеялары менән бергә осор ҡаршылыҡтары тураһында өҙгөләнеп уйланыуҙар, шул уҡ ваҡытта яҡты киләсәккә өмөтләнеү мотивтарының урын алыуы, уның социаль-тарихи ерлеге. Ш. Бабич ижадында романтизм. «Бер минут», «Көрәшеп |

| | | |
|---|---|---|
| | | үткәр ҡыҫҡа ғүмеренде», «Әйҙә, күңелем!», «Көтәм», «Мин - даһи!» һ.б. шиғырҙарының идея-проблематикаһы, художество үҙенсәлектәре.. Шағир ижадында хәҡиҡәтте таба алмайынса, төшөнкөлөккә бирелеү («Үткән көндәр», «Ҡараңғылыҡта»), хыялда яңы донъялар эҙләү мотивтарын бәхетте һәм йәшәү мәғәнәһен халыҡ өсөн көрәштә табыу идеяһы алмаштырыуы. «Халҡым өсөн», «Кем өсөн?», «Йәшәһен эшселәр!» шиғырҙары. |
| 2.14 | Позия М.Гафури | М.Ғафури шиғриәтендә көрәшкә саҡырыу мотивы («Сәләм», «Ант», «Хисап көнө», «Беҙҙең юл», «Татар егетенә», «Ҡарт батыр теләге», «Йыртылған сәхифәләр» һ.б).<br>М.Ғафури шиғриәтендә ижади, яңыртыусы көс булараҡ Октябрь революцияһы: а) яңы замандың дөйөм һыҙаттары («РКСМ», «Ҡыҙыл таҡтаға», «Ураҡ һәм сүкеш» һ.б.); б) яңы заман идеалы булараҡ азат хеҙмәт, изге эш («Бир ҡулыңды», «Гөлдәр баҡсаһында», «Эш һәм белем»). в) хеҙмәт кешеһенең сифаттары («Шахтер», «Бал ҡорто һәм күгәүен», «Эшкә,эшкә»); «Эшсе» поэмаһы. Төп геройҙың үҙенсәлектәре. Әҫәрҙә ауыл һәм ҡала, бай һәм ярлы тормош картиналары. М.Ғафуриҙың хеҙмәт хаҡында фәлсәфәле уйланыуҙары. М.Ғафури ижадында мөхәббәт һәм тәбиғәт лирикаһы.<br>М.Ғафури шиғриәтендә яңы йөкмәткене иҫке төшөнсәләр ярҙамында сағылдырыу, уның әһәмиәте. Шағир ижадында антитеза алымы. |
| 2.15 | Роль творчества М.Гафури в формирование реалистического метода | Шағир ижадының өлгөрөү мәле. Уның социалистик реализм сиктәрендә барыуы. Ижадының төп йүнәлештәре, тематик һәм жанр төрлөлөгө, художество үҙенсәлектәре. Яңы заман идеалы булараҡ азат хеҙмәт, изге эш. «Эшсе» поэмаһы. Төп геройҙың үҙенсәлектәре. Әҫәрҙә ауыл һәм ҡала, бай һәм ярлы тормош картиналары. М. Ғафури ижадында тормошто реалистик – натуралистик планда һүрәтләүсе «Кеше ашаусылар» поэмаһында осор фажиғәләрен һүрәтләү. М. Ғафуриҙың прозаһы. |
| 2.16 | Жизнь и творчество Д.Юлтыя | Д.Юлтыйҙың тормош һәм ижад юлы. Д.Юлтыйҙың 20-се йылдарҙа яҙылған шиғырҙарының идея-эстетик үҙенсәлектәре («Атлан батыр!», «Әйҙә, эшкә», «Киңлеккә», «Һыҙ, ҡәләм», «Ҡыҙыл сәскә» һ.б.) «Күк шағирына», «Ул ерһетте йәшлегемде» әҫәҙәренең ижтимағи-эстетик әһәмиәте. «Шәрәф», «Мәйсәрә», «Айһылыу», «Нефть тураһында әкиәт» поэмаларының |

| | | |
|---|---|---|
| | | үҙенсәлектәре, яңы заманды раҫлау мотивтары. Д.Юлтыйҙың проза әҫәрҙәрендә герой проблемаһын хәл итеү: «Ҡан» романының темаһы, идеяһы, йөкмәтке үҙенсәлектәре. Персонаждарға характеристика. Әҫәрҙәге натуралистик һүрәтләүҙәр, уның сәбәптәре. Романдың сюжет-композицион һәм жанр үҙенсәлектәре. «Ҡарағол» драмаһының конфликтына заман йоғонтоһо.Төп геройҙарға характеристика. Драманың башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны. |
| 2.22 | Историко-революционные романы в башкирской литературы 30-ых годов. | Әҙәбиәттә роман жанрының ныҡлап урын алыуы. А. Таһировтың «Һалдаттар», Д. Юлтыйҙың «Ҡан», романдары. И. Насыриҙың «Күҙәй», А. Таһировтың «Ҡыҙылгвардеецтар», «Ҡыҙылармеецтар» романдары. Ғ. Дәүләтшиндың «Коммуна», И. Насыриҙың «Беҙ һул яҡ ярҙан», Һ. Дәүләтшинаның «Ялҡынлы йылдар» кеүек әҫәрҙәренең идея-эстетик йөкмәткеһе, сюжет, композиция үҙенсәлектәре. |
| 2.24 | Жизнь и творчество Г. Саляма | Ғ. Сәләмдең тормош һәм ижад юлы. «Ғ.Сәләем тураһында иҫтәлектәр» ( 1987) китабына күҙәтеү яһағыҙ.<br>Ғ. Сәләмдең «Йыр, йыр кәрәк герой турында», «Ҙур юл һәм һикәлтәләр», «Һөйләнмәгән телмәр», «Терелтәһе ине шағирҙы», «Шиғыр илауы» әҫәрҙәрен анализлағыҙ. Автор күтәргән проблемалар, уларҙың бөгөнгө көнгә мөнәсәбәте хаҡында фекер алышығыҙ.<br>Ғ.Сәләм шиғырҙарында һүрәтләү алымдары, композицион саралар, образдарҙың эшләнеше («Һәйкәл», «Асыу», «Республика иртәһе» һ.б. шиғырҙары).<br>Ғ.Сәләмдең сюжетлы шиғырҙарға килеү сәбәптәре. Балладалары.<br>Ғ.Сәләмдең «Ғүмер», «Өс йыр»  әҫәрҙәренең идея-эстетик йөкмәткеһе.<br>Ғ. Сәләмдең «Бала» поэмаһында йәмғиәт һәм ғаилә. Әҫәрҙең художестволы үҙенсәлектәре. Поэманан өҙөк ятларға.<br>Ғ. Сәләмдең «Шоңҡар» поэмаһында заман һәм шәхес мөнәсәбәте. Әҫәрҙең композицион эшләнеше. Новеллизм куренеше.<br>Ғ. Сәләм шиғриәте әһәмиәте. |
| 2.26 | Жизнь и творчество Г. Хайри | Ғ.Хәйри тормошо һәм ижад юлы.<br>Ғ. Хәйриҙең «Кооператорҙар», «Бүлмә» повестарында заман проблемаларының ҡуйылышы.<br>Ғ.Х8йриҙең «Ҡатын», «Өсәүҙең тарихы» повестарының идея-тематик йөкмәткеһе, |

| | | |
|---|---|---|
| | | конфликт үҙенсәлектәре.<br>Башҡорт романының тыуыуы. «Боролош» романының сюжет-композиция, конфликт үҙенсәлектәре.<br>Романда халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәше. Революционерҙар образдары. Заман ҡаршылыҡтарын реаль картиналарҙа һүрәтләү.<br>«Боролош» романында ғаилә, ҡатын-ҡыҙ яҙмыштары һүрәтләнеше.<br>Ғ. Хәйри ижадының  башҡорт әҙәбиәте үҫешендәге роле. |
| 2.28 | Жизнь и творчество И.Насыри | И. Насыри ижадында нәҫер жанры («Ҡояш көлә лә, йылмая ла, ыржая ла», «Һин  көлгәндә мин бит көлмәнем», «Беҙ бит пар түгел» һ.б.).<br>Яҙыусының хикәйәләрендә  реалистик һүрәтләүҙең нығыуы («Диуана ҡылдар», «Ҡарлуғастар» һ.б.).<br>И. Насыриҙың «Сибай» повесында реалистик һүрәтләүгә ынтылыш. Яңы кеше тыуыуын психологик планда күрһәтеү. Төп образдың үҙенсәлектәре.<br>«Еңелген ятыу» повесында кеше күңелендеге ҡатмарлы психологик процесты сағылдырыу. Шәрәфи образы.<br>«Күҙәй» романында революцион ваҡиғаларҙың бирелеше:<br>а) конфликт үҙенсәлектәре; б) романдың сюжет-композиция үҙенсәлектәре, Ғимай Басыров образы; в) Абдулов, Ҡарабаш ише кире типтарҙы һүрәтләү; г) әҫәрҙә заман йоғонтоһо. |
| 2.29 | Жизнь и творчество А. Карная. | А. Карнайҙың тәүге нәҫер һәм хикәйәләрендә үҙ темаһын һәм  геройҙарын эҙләү үҙенсәлектәре. «Боролош», «Тирмәнсе ҡыҙы», «Зимагор» хикәйәләрендә иҫкелек һәм яңылыҡ көрәшен драматик ваҡиғалар аша сағылдырыу.<br>А.Карнай ижадында абстракт романтизм күренеше. («Әсәйем хаты», «Мөхәббәт тураһында», «Беҙ – таң кешеләре» хикәйәләре).<br>А.Карнай ижадында очерк жанры. («Далалағы уттар», «Ишембай»).<br>Али Карнайҙың «Беҙ ҡайтырбыҙ» повесы.<br>а) әҫәрҙә заман һәм халыҡ. Сәғиҙуллин һәм Камалов образдарына сағыштырма ҡылыҡһырлама (яҙма рәүештә);<br>б) кире геройҙарҙы драматик ситуацияларҙа фашлау;<br>в) сәнғәт һәм заман мөнәсәбәте, сәнғәт кешеләренең фажиғәһе. |

| | | |
|---|---|---|
| 2.31 | Жизнь и творчество Сагита Мифтахова | С. Мифтаховтың тормош һәм ижад юлы.<br>С. Мифтаховтың «Зимагорҙар» драмаһында халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәше.<br>С. Мифтаховтың «Һаҡмар» һәм «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» драмаларының конфликт үҙенсәлектәре. Социаль проблемаларҙың художестволы хәл ителеше.<br>С. Мифтаховтың «Ялан ҡыҙы» драмаһының идея-эстетик йөкмәткеһе.<br>Башҡорт драматургияһы үҫешендә С.Мифтахов ижадының роле. |
| **3** | **История башкирской литературы в 40-50-е гг. XX века** | |
| 3.7 | Творчество Р.Нигмати | Р. Ниғмәти – Башҡортостандың халыҡ шағиры. Ижадының әһәмиәте. Һуғыштан һуңғы ижадында Тыуған ил, Башҡортостан, халыҡ тарихы, хеҙмәт темаларының хәл ителеше. «Большевик», «Осҡондан ялҡын» поэмаларында осорҙоң идеологик һыҙаттарының сағылышы. «Һаҡмар ҡыҙы» поэмаһында рухи яҡтан камил шәхесте һынландырыу. Мөхәббәт һәм тыуған илгә һөйөү, уның алдында яуаплылыҡ темалары. |
| 3.8 | Творчество С.Агиша | С. Агиш – хикәйә оҫтаһы. «Эш самауырҙа түгел», «Ҡунаҡ һәм намыҫ», хикәйәләрендә ябай кеше образының социаль-психологик портреты. Характер, деталдәр менән оҫта эш итеү. Ижадында яңы темаларға мөрәжәғәт итеү, замандың социаль һыҙаттарына, кешенең яңы шарттарҙа һәйбәт яҡҡа үҙгәреше мәсьәләләренә баһа бирергә ынтылыу. «Фәтхи һалдат» хикәйәһендә тарихи тема. «Нигеҙ» романы. Тормошто киң эпик һүрәтләүҙә авторҙың тәүге тәжрибәһе. |
| 3.9 | Творчество Б.Бикбая | Б. Бикбайҙың һуғыш осоро ижады. «Ҡулъяулыҡ», «Фрицтың кресы» һ.б. шиғырҙарының еңеү рухы менән һуғарылыуы. «Ҡарлуғас» драмаһының конфликты, тарихи ерлеге, Баяр Садовский, Яҡуп старшиналарға Шатморат, Ҡарлуғас, Ҡормой һ.б. ҡаршы ҡуйылыуы. «Салауат», «Ҡаһым түрә» драмаларында геройҙарҙың, ваҡиғаларҙың тарихи ерлеккә нигеҙләнеүе. Б. Бикбайҙың «Шәүрә» операһына либреттоһы, «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы – башҡорт сәхнәһендәге яңы күренеш. Б. Бикбай прозаһы. |
| 3.10 | Жизнь и творчество М.Бурангулова | М. Буранғолов – драматург. 20-се йылдарҙа ижад ителгән һәм Башҡорт дәүләт драмтеатрында ҡуйылған пьесалары. «Башҡорт туйы», «Ялан Йәркәй», «Таштуғай», «Ашҡаҙар» кеүек көнкүреш ваҡиғаларына нигеҙләнгән легенда сюжеттарын ижади |

| | | |
|---|---|---|
| | | үҫтереү. Драмаларҙың шул дәүер тамашасыһына тәғәйенләнгәнлеге. М. Буранғоловтың тарихи-революцион пьесалары: «Иҙеүкәй менән Мораҙым» әҫәре. Фольклорға хас халыҡ батырҙарын идеаллаштырыу традицияһын дауам итеү, Ҡараһаҡал, Ялан Йәркәй образдары. |
| 3.11 | Роман «Иргиз» Х.Давлетшиной | Шәхес культы осоронда яҙыусының фажиғәле яҙмышы, «Ырғыҙ» романының яҙылыуы шарттары (1942-1952). 1957 йылда ғына баҫылып сыға алыуы. Бында Р.Ниғмәтиҙең роле. 1967 йылда С. Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелеүе. Тарихи-революцион теманың ҙур прозала яңыса сағылышы. 20–30-сы йылдарҙағы тарихи-революцион романдарҙан айырмалы художестволы эшләнеш буйынса ыңғай яҡтары, композицияһы, сюжет төҙөү. Тел-стиль саралары, халыҡ ижады мотивтары. |
| 3.12 | Творчество Д.Исламова | Тормош юлы. «Ҡыҙҙар» повесында күңел драматизмы, кеше психологияһы, әхләҡи-рухи өлкәләге эҙләнеүҙәр. Социаль-психологик роман булараҡ «Йомарт ер» әҫәре. Динис Исламовтың «Мәскәү юлы» романы. Әҫәрҙең темаһы, образдар системаһы, сюжет-композиция үҙенсәлектәре. «Көньяҡ ҡояшы» – тамамланмаған роман. |
| 3.13 | Творчество Х.Гиляжева | «Ҡырҡ алтынсы һалдат» поэмаһы (1961). Әҫәрҙә әхләк-этик проблемаларҙың хәл ителеше. Һәр һуғышсының үҙ мөхәббәтен 46-сы һалат тип иҫәпләүе. Яугир батырлығына һәм унның тоғрологона, мөхәббәт менән тулы саф йөрәгенә дан йырлау.Х. Ғиләжев – шағир-публицист. Шиғырҙарының поэтик үҙенсәлектәре. «Погонһыҙ һалдаттар» – социаль-психологик роман (1963). Романдың осор һулышын, уның ҡаршылыҡтарын тәрән күрһәтә алыуы. Әҫәрҙә күтәрелгән төп проблемалар. |
| 3.14 | Творчество А.Бикчентаева | Ә. Бикчәнтәев ижадында хеҙмәт кешеһе образы. «Ҡарасәй юлы» (1954) – башҡорт нефть индустрияһы темаһына мөрәжәғәт иткән тәүге роман, ундағы төп проблемалар. Башҡортостанда нефть булыу-булмау мәсьәләләренә ике төрлө ҡараштың сәйәси, әхлаҡи фонда ҡалҡыу итеп һүрәтләү, уның конфликт нигеҙенә ятыуы. Романдың композицион үҙенсәлектәре. «Ожмах вәғәҙә итмәйем» романында осор ҡаршылыҡтарының замандың йәш кешеһе Хәйҙәр Аюдаров образында бирелеше. |
| 3.17 | Творчество Х.Карима | Тормош һәм ижад юлы. Х. Кәрим ижадында |

| | | |
|---|---|---|
| | | публицистик пафос. Ауырлыҡтар аша ниһәйәт бәхет табыу, «Минең илемдә ҙур ҡояш, ҙур ай» мотивы, яңы социалистик төҙөлөштө маҡтау һәм данлау, уның ижадсыһы булыу менән ғорурланыу хистәре. Башҡортостан радиоһы аша Х. Кәримдең «Асыу йыры» шиғыры яңғырауы. Хәниф Кәрим ижадында ябай һалдаттың күңел торошон, дошманға нәфрәт хистәрен сағылдырыу. Тыуған илгә һөйөү, уны һаҡлау темаһы. Кешенең күңел донъяһын тәрәнерәк асыуҙы маҡсат иткән «Алтын башаҡ» поэмаһы. |
| **4** | **История башкирской литературы в 60-70-е гг. XX в.** | |
| 4.7 | Тема современности в прозе. Развитие жанровых форм. «Лирическая» проза. «Производственный» роман. Концепция героя в прозе советского периода. Особенности изображения действительности на основе соцреализма | Лирик проза үҫеше.<br>а) Терминологик характеристика.<br>б) Лирик повесть булараҡ З. Биишеваның «Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар», «Ҡайҙа һин, Гөлниса?» әҫәрҙәре.<br>в) Ф. Исәнғолов. «Аҡкошом минең» лирик повесы. |
| 4.8 | Особенности башкирской «деревенской» прозы 60-70-х годов. Тема родной земли и судьбы деревни | Прозала ауыл темаһы (дөйөм күҙәтеү).<br>а) Н. Мусин повестары.<br>б) Ш. Янбаевтың роман, повестары.<br>в) Р. Солтангәрәев. «Беҙ йәшәгән ер» романы.<br>Производство тематикалы әҫәрҙәр.<br>а) Б. Рафиков. «Сал ҡылған», «Тауҙарҙа ҡар иртә ята» әҫәрҙәре.<br>б) Рәшит Солтангәрәев. «Тау», «Аҡ сәскә», «Йылы ямғырҙар» әҫәрҙәре.<br>Хәрби проза.<br>а) Ә. Хәкимовтың «Бәйге», «Аҡһаҡ бүре», «Күпер» әҫәрҙәре.<br>б) И. Абдуллин прозаһы. «Хуш Рим» һ.б. |
| 4.10 | Жизнь и творчество. Поэзия М.Карима | Әҙәбиәткә килеү юлдары. Шағирҙың һуғышҡа тиклемге ижады. «Отряд ҡуҙғалды», «Яҙғы тауыштар» исемле тәүге шиғри йыйынтыҡтарының төп мотивтары һәм стиль үҙенсәлектәре. «Мин һуғышҡа китәм, иптәштәр!» (1941) шиғыры менән М. Кәримдең һуғыш йылдары ижады һәм хәрби юлы башлауы. «Ташта үҫкән гөлдәр», «Ямғыр», «Башҡорт халҡына яуап хат» һ.б. шиғырҙары, М.Кәримдең һуғыш осоро поэзияһының лирик геройы.<br>М. Кәримдең һуғыштан һуңғы осорҙағы ижады. Илен ҡурсалаусы һалдат-патриот образы. «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа» шиғырында автобиографик мотивтар. «Европа-Азия» шиғырҙар циклында (1951) илдәр һәм ҡитғалар, |

| | | |
|---|---|---|
| | | кеше яҙмышы хаҡында фәлсәфәле уйланыуҙар. Тыныслыҡ өсөн көрәш темаһы, «Россиянмын», «Ҡайын япрағы тураһында» кеүек шиғырҙарҙа осор үҙенсәлектәре сағылышы. «Вәғәҙәләр бирмә», «Йырым менән бәхәс» шиғырҙарында ижад асылы, шағир һәм заман хаҡында фекерҙәр, йырҙа ысын тормош проблемаларын сағылдырыу ихтыяжын алға ҡуйыу, уның заманы өсөн ҡыйыу һәм ваҡытлы булыуы. «Айһылыуҙың күҙ йәштәре» шиғырында йәмғиәттә шәхестең урыны, уны ҡәҙерләү кәрәклеге хаҡында тәнҡитле уйланыуҙар.<br>М. Кәримдең 60-70-се йылдар шиғриәтендә философик лирика, мөхәббәт һәм граждандлыҡ лирикаһы. «Ағиҙелдә аҡ пароход», «Мине тағы ташлап китәһең», «Айырылыу юҡ», «Йәшәйһе бар, һаҡла үҙеңде тиһең», «Ҡоштар осорам» һ.б. шиғырҙарында шәхси һәм ижтимағи ынтылыштар берлеге, йәшәү маҡсаты, граждандлыҡ тойғолары сағылышы.<br>М. Кәрим поэмалары. Жанр һәм стиль эволюцияһы йәһәтенән «Таныш булмаған ҡунаҡ», «Декабрь йыры», «Ҡара һыуҙар» поэмаларының сюжеты һәм композицияһы. Мөхәббәт, ил алдында бурыс, яуаплылылҡ мәсьәләләре. «Ҡара һыуҙар» поэмаһының башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны, эпик һүрәтләүҙәрҙең нескә лирик-субъектив, психологик план менән йәнәш барыуы. Яҡуптың һатлыҡ йән икәнен белгәс, иңдәренән ҡара шәлен һалған Ҡатын образы. «Үлмәҫбай» поэмаһында фольклор поэтикаһы. Әҫәрҙең юмористик стиле, романтик дөйөмләштерелгән образдар. «Сер», «Йылмайыу» поэмаларында аллегория, шартлылыҡ күренештәре. |
